ВОСХОД
№46 (10144)
Пятница
29 ноября 2024 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №4 (157)
НОЯБРЬ 2024 ЙЫЛ

ТАРИХЫ

# ХАЛЫҠ – ТЕЛ, МӘҘӘНИӘТ ҺӘМ ЙОЛАЛАРҘЫ ҺАҠЛАУСЫ

## 2025 ЙЫЛДА АРҒАЯШ РАЙОНЫ БАШҠОРТТАРЫ ҠОРОЛТАЙЫН ОЙОШТОРОУҒА 30 ЙЫЛ ТУЛА

**Тарихсы, тыуған яҡты өйрәнеүсе Рәшит Шәүҡәт улы Хәкимов һәм уның «Арғаяш ере. Тарих һәм хәҙерге заман» китабы ярҙамында ҡоролтай тарихы биттәрен барлайыҡ.**

1990 йылдың апрелендә Арғаяш районында «Арғужа» Башҡорт мәҙәни үҙәге ойошторола. Уның беренсе рәйесе итеп Бәжекәй урта мәктәбе уҡытыусыһы, милли мәҙәниәт һәм телдең ысын көрәшсеһе Рафаэль Йомасолтан улы Мөхәмәтйәнов һайлана.

Районда туған телде һәм милли мәҙәниәтте тергеҙеүгә күп көс һалған райондың баш ветеринар табибы Иҙелйәр Нусурат улы Садиҡов, уҡытыусы Нәғимә Хужа ҡыҙы Усманова, педагогик хеҙмәт ветерандары Табрис Мәжит улы Минһажин, Зәйтүнә Ҡәйүм ҡыҙы Хәйруллина, Партия һәм совет хеҙмәткәрҙәренән Ҡолойҙан Әғлиулла Хөснулла улы Солтангәрәев, Ятраҡолдан Янах Мифтах улы Заһретдинов, Яңы Субыл ауылынан Үлмәҫҡоловтар ғаиләһе – Кәшәф Абдрахман улы һәм Динә Ғәли ҡыҙы, өлкә Башҡорт мәҙәни үҙәгенең беренсе рәйесе Урал Ҡафи улы Сәфиуллин (Арғаяш ерендә, Аҡбаш ауылында тыуған).

1995 йылда ойоштороу конференцияһында Арғаяш районы башҡорттары ҡоролтайы булдырыла. Ҡоролтай башҡарма комитетының беренсе рәйесе итеп Фәрит Мөхәмәтйән улы Вәлиев һайлана. 1997 йылда район депутаттар Советы тарафынан «Арғаяш районының башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү» программаһы раҫлана. Райондың күпселек мәктәптәрендә тел һәм мәҙәниәт тергеҙеү үҙәктәре эшләп килгән була, 47 мәктәптә балалар үҙ туған телен өйрәнә башлай. Арғаяштарҙың көсләп онотторолған күренекле эшмәкәрҙәренең исемдәре тергеҙелә башлай. Халыҡтың, уҡыусыларҙың үтенесен тормошҡа ашырып, депутаттарҙың район советының 1999 йылдың 30 сентябрендәге ҡарары менән Леваш ауылының башланғыс мәктәбенә Нуриәғзәм Таһир улы Таһиров исеме бирелә. Ә Көҙәш урта мәктәбенә район советының 1998 йылдың 22 апрелендәге ҡарары менән Хафиз Ҡушай улы Ҡушаев исеме бирелә. 80-се йылдар аҙағында район халҡының дини өлөшө мосолман мәсетен асыу мәсьәләһен ныҡышмалы күтәрә башлай. Урындағы власть органдары дин мөрәжәғәттәренә ыңғай яуап бирә. Районда иң тәүге булып 1990 йылдың 25 апрелендә Ҡолой мәсете асыла. Уға китапхана бинаһы кире ҡайтарыла, бында 1954 йылға тиклем мәсет урынлашҡан була.

1990 йылдың июнендә күп тиҫтә йылдар эсендә тәүгеләрҙән булып мосолмандар өсөн изге урынға – Мәккәгә Арғаяш районы кешеһе, 84 йәшлек Ризван Көсөков (Ҡолой ауылынан) хажға сыға. Туҡһанынсы йылдарҙа үҙ ғүмерен дингә хеҙмәт итеүгә бағышларға ниәтләгән йәштәр тәүге тапҡыр дини уҡыу йорттарына инергә мөмкинлек ала. Районда яңы мәсеттәр сафҡа инеүен дауам итә. 1991 йылда Дәрүиш ауылында мәсет иман таратыуын башлай. Халыҡ инициативаһы буйынса һәм урындағы власть органдары ярҙамында артабанғы йылдарҙа Ишәле, Байрамғол, Байғаҙы, Иҫке Субыл, Яңы Субыл ауылдарында, 2003 йылда Мәтәл һәм Ятраҡол ауылдарында мәсеттәр ҡалҡып сыға. 1997 йылдың декабрендә Арғаяшта район хакимиәте тапшырған торлаҡ йорт бинаһында мәсет асыла. 2005 йылдың ғинуарында Усман ауылында мәсет үҙ эшен башлай. (Сығанаҡ: Рәшит Хәкимовтың «Арғаяш ере. Тарих һәм хәҙерге заман» китабы).




Фотоһүрәттәргә ҡултамғалар: «Восход» фотохәбәрсеһе Фуат Ишбирҙин 1997 йылда район ҡоролтайының «Арғаяш районының башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү» программаһын раҫлау мәлен тарих өсөн һаҡлап ҡалды.

Ҡоролтай президиумында Салауат Юлаев исемендәге совхоз директоры Ғәйнетдин Әбсәләмов, Көньяҡ Урал көрәш мәктәбенә нигеҙ һалыусы Харис Йосопов, Арғаяш башҡорт халыҡ театрын ойоштороусы Сәйҙә Солтанова, Халыҡ шағирәһе Кәтибә Кинйәбулатова, район депутаттар Советы рәйесе Марс Әлимов, Район ҡоролтайы рәйесе Фәрит Вәлиев, Арғаяш районы башлығы Марат Камалов һәм башҡалар.

ПОЧТАНАН

## «Арғужа-2024» башҡорт фольклоры буйынса район конкурсы уҙҙы

**Ауыҙ – тел ижады телде барлыҡҡа килтергән, ынйылар туплаған Арғаяш районындағы халыҡ та үҙ ижадын онотмай.**

Үткәрелеп килгән саралар ошо турала һөйләй. Егерме беренсе быуатта йәшәһәк тә, фольклор ынйылары үҙ бәҫен юғалтмай, ошо сараларҙың биҙәге булып тора. 17 ноябрьҙә «Арғужа-2024» башҡорт фольклоры буйынса район конкурсы уҙҙы. Сара барлыҡ ижад һөйөүселәрҙе туплаңы. Быйыл конкурста яңғыҙ башҡарыусылар һәм фольклор коллективтары ҡатнашты. Был байрам ауыҙ – тел ижадының бай йөкмәткеле булыуын күрһәтте. Сәхнәнән оҙон көй, мөнәжәт, сеңләү, бәйет, таҡмаҡтар кеүек ауыҙ-тел ижады жанрҙары яңғыраны. Яңғыҙ башҡарыусылар араһынан Рәфинә Сиражитдинова «Эй, хоҙайым, ярлыҡай күр» исемле мөнәжәт башҡарып (Мәтәл), Йәмил Хидиятуллин «Эскадрон» исемле оҙон көй башҡарып беренсе урын яуланылар. Икенсе урын өс кешкгә бирелде, ул да булһа, Асияға Тимирбаева «Һыу буйлап» исемле башҡорт халыҡ йыры өсөн (Бәжекәй), Гөлсара Хайбуллинаға «Ауыл көйө» исемле йыр өсөн (Ятраҡол), шулай уҡ Кәтибәгә Хайретдинова «Ҡәрҙәштәрем» исемле мөнәжәт башҡарғаны өсөн (Ятраҡол).

Өсөнсө урындарҙы ла өс кеше яуланы: Мәскүҙә Сафарова (Дәрбеш) «Лә иллаһы илалла» мөнәжәте өсөн, Гөлшиҙә Мәғәфурова (Айбат) сеңләү башҡарып, Зөлфиә Аккужина (Иҫке Субыл) «Зауап ҡылдым» мөнәжәтен башҡарғаны өсөн. Фольклор коллективтары араһынан Шишмәләр коллективы (Яңы Субыл), «Субыл шишмәләре» мөнәжәте өсөн, шулай уҡ Азалия коллективы (Аҡбаш) «Ләүсәтин» исемле башҡорт халыҡ йыры өсөн беренселекте алдылар. Иҫке Субылдың «Умырзаяя» коллективы «Ҡунаҡ булдым өйөгөҙҙә» мөнәжәтен башҡарып өсөнсө урын яуланы. Ҡатнашыусыларҙың барыһына ла диплом һәм бүләктәр тапшырылды.

Конкурс Аяҙғол мәҙәниәт йортонда үтте. Тәжрибәле алып барыусы, үҙ эшенең оҫтаһы Ольга Мухаметдинова ошо сараның беренсе минуттарынан уҡ байрам атмосфераһын булдырҙы һәм һәр ҡатнашыусының кәйефен күтәрҙе. Шуғалыр ҙа байрам күтәренке кәйефтә үтте. Арғаяш районы ерлегендә бындай саралар уҙып торһон, ауыҙ-тел ижады халыҡта йәшәһен һәм юғалмаһын.

*Сабира ШӘРИПОВА.*

ДАТАҺЫ

# СӘХНӘГӘ ҒАШИҠТАР

## АРҒАЯШ БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ТЕАТРЫНА 35 ЙЫЛ ТУЛДЫ

**РИММА ҺИБӘТУЛЛИНА,**
*баш мөхәррир*
**Театр архивынан фото**

**Арғаяш башҡорт халыҡ театры 1989 йылда ойошторола. Уның нигеҙен район мәҙәниәт Йорто эргәһендәге театр түңәрәге һалған, уны Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы Солтанова ойошторған.**





### ТЫУҒАН ИЛЕНӘ ҠАЙТА

Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы Ҡолҡай ауылында тыуған, Арғаяш башҡорт педагогия училищеһын тамамлаған. Башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләй, әммә сәхнә артабан уның ысын һөнәренә әйләнә. Тәбиғәт уға сағыу таyыш, органик пластика, көслө характер, үҙенең илһамланыуы менән кешеләрҙең йөрәктәрен ҡабыҙыу һәләте бүләк иткән. Салауат халыҡ театры сәхнәһендә уның артислыҡ таланты асылды. Арғаяш районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Рәфит Баязитов театр коллективын үҙҙәрендә ойоштororға саҡырып, яҡташыбыҙға мөрәжәғәт итте. Сәйҙә Солтанова саҡырыуҙы ҡабул итә. Оҙаҡ көттөрмәйенсә ул Арғаяшҡа килә, талантлы һәм туған телгә, башҡорт мәҙәниәтенә ғашиҡ кешеләрҙе бик тиҙ үҙе тирәләй берләштерә.

Артислыҡ оҫталығына төшөнөүҙе баштан башларға тура килә: сәхнәлә дөрөҫ хәрәкәт итеү, тексты әйтеү, тамашасы уны һуңғы рәттә ишетһен өсөн, рухлы уйнау, зал менән эмоциональ бәйләнеш булдырыу, уны борсоларға, шатланырға һәм иларға мәжбүр итеү... Театрға мөкиббән ғашиҡ һәм уға тоғро булған Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы ижади коллектив булдырыуға күп көсөн һала. Ул репертуар һайлағанда труппала яңы актерҙар булыуына ташлама яһамай. Яңы ғына ойошҡан коллектив бик тиҙ сәхнә тәжрибәһе туплай, режиссеры артынан ҡатмарлы күренгән сценарийҙарға ла ҡыйыу тотона. «Туй бүләге» исемле тәүге спектаклде сәхнәгә сығарыу тик Арғаяш районы өсөн генә шатлыҡ булманы, ә тотош өлкәнең мәҙәни тормошонда иҫтәлекле ваҡиғаға әүерелде. Коллектив был спектакль менән бөтә районды гиҙеп сыға, хатта күрше тирәләге сәхнәләрҙә лә сығыш яһайҙар. Хәбил Халиҡов, Әнисә Халиҡова, Разия Хоҙайбирҙина, Фәниә Шафиҡова, Рафаэль Мөхәмәтйәнов, Ғәйфулла Мәжитов, Вәсиә Һаҙиева ролдәрен оҫта башҡарҙылар. Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы менән Разия Әхмәт ҡыҙының дуэты шул тиклем сағыу һәм дәртле була, тамашасылар уларҙы оҙаҡ ваҡыт ҡул сабып, аяғөҫтө тәбрикләп, сәхнәнән ебәрмәй тора. Труппаның биш актерына өлкә халыҡ ижады Үҙәге үҙешмәкәр сәнғәт лауреаты исемен бирә.

Башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә» спектакле тамашасыларҙың хәтерендә мәңгелеккә уйылып ҡалған. Күмәк уйнаусылар эпизодында төп актерҙар менән бергә йәштәр ҙә: училище студенттары, уҡыусылар, педагогтар ҙа сыға. Тап ошо спектаклдәрҙән Салауат театрында танылыр актер Рөстәм Фазылов һөнәренә юл башлай. Театр репертуары киңәйә, актерҙар «Ҡыҙ урлау», «Байрамбикә», «Ҡарлуғас», «Ул ҡайтты» спектаклдәрендә илһамланып уйнай. 1991 йылда коллективҡа халыҡ театры исеме бирелә. Емешле эше өсөн Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙына Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре исеме бирелде.

### ЭШТЕ ДАУАМ ИТЕҮСЕЛӘР

Сәхнәгә ҡуйыу процесын ойоштороуҙа, репетицияларҙа һәм гастролдәрҙә Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙының иң әүҙем ярҙамсыларының береһе рәссам-ҡуйыусы Фәрхәнә Зөлфитдин ҡыҙы була. Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы Салауатҡа ҡайтҡанға тиклем, театр сәнғәтендә беренсе уҡытыусыһының эшен лайыҡлы дауам итеүсе булараҡ, башта Дәрүиш ауылында, ә һуңынан Ишәле ҡасабаһында үҙенең «Һомай» театр коллективын ойоштора.

Арғаяш башҡорт халыҡ театрын 2005 йылдан Хәбил Халиҡов етәкләне. Коллектив үҫә, үҫешә, яңы ижади бейеклектәр яулай барҙы. Александр Островскийҙың «Йәшен» һәм Карл Гольдониҙың «Ике әфәндenең хеҙмәтсеһе» кеүек спектаклдәр менән артистар өлкә генә түгел, бөтә Рәсәй халыҡ театрҙары конкурстары сәхнәһен дә яулай. Харис Фәйзуллин, Рәфис Нафиҡов, Эльвира Ғизәтуллина, Луиза Әминева, Лира Хөсәйенова, Уел Бәҙретдинов, Мәрзиә Сәҙретдинова, Вәсиә Һаҙиева театрҙың алдынғы актерҙары кимәлендә сағыу, үҙ-үҙен онотоп уйнаны. Тап ошо юғары башҡарыу оҫталығы коллективҡа төрлө кимәлдәге конкурстарҙа байтаҡ наградалар һәм дипломдар килтерә.

2006 йылда театр коллективы «Көнләш, Америка, көнләш!» спектакле өсөн Силәбелә уҙғарылған бөтә Рәсәй һәүәҫкәр театр һөйөүселәренең фестивалендә Гран-при алды. Уны яҡташтары саҡырыуы буйынса Рөстәм Фазылов ҡуйҙы, төп ролдәрҙең береһен үҙе башҡарҙы. Һуңыраҡ итальян классигы Карло Гольдониҙың «Ике әфәнденең хеҙмәтсеһе» пьесаһы буйынса ҡуйылған спектакль үҙешмәкәр актерҙарға II өлкә “Ике битлек – 2007” халыҡ театрҙары фестивалендә призлы урын килтерә. 2008 йылда арғаяштар Иваново ҡалаһында «Провинцияла театр осрашыуҙары» I бөтә Рәсәй ауыл театр коллективтары фестивалендә ҡатнаша һәм яңынан дипломант була. Бер йылдан арғаяш труппаһы Башҡортостанда үткән фестивалдә уңышын ҡабатланы. Шул уҡ ваҡытта уға «Көньяҡ Уралдың атҡаҙанған художестволы ижад коллективы» исеме бирелә. 2012 йылда Башҡортостан Республикаһында «Алтын тирмә» фестивалендә театр «Башҡорт туйы» спектаклен күрһәтте. 2013 йылда Ярославль ҡалаһында «Һунар комедианттары» халыҡ-ара фольклор театрҙары фестивалендә ҡатнаша. 2014 йылда “Һомай” репертуарында «Тау аръяғында тал илай» спектакле барлыҡҡа килә, уның менән труппа «Ике битлек-2015» I бөтә Рәсәй Һәүәҫкәр театрҙар фестивалендә уңышлы сығыш яһай һәм II дәрәжә лауреат дипломына лайыҡ була. Шул уҡ йылда арғаяштар алтын тирмә милли театрҙарының төбәк-ара фестивалендә үҙ оҫталыҡтарын уңышлы күрһәтә һәм яңынан дипломант дәрәжәһенә ирешә.

### Ә ТЕАТР ТЕРЕ!

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, коллективҡа шул тиклем күп йән һәм көс һалған Хәбил Халиҡ улы бик иртә вафат була. Уның эшен ҡатыны Әнисә Абдулхай ҡыҙы дауам итә. Спектакль репертуарында ҡатын-ҡыҙ темаһы өҫтөнлөк итә башланы. Ижади күтәрелештәр була торҙо: «Ер өҫтөндә йәйғор эленеп торҙо», «Күрәҙәсе», «41 йәшлек арбалы ҡатын-ҡыҙҙар», «Өйләнеү» спектаклдәре уңышлы барҙы. Улар өҫтөндә эшләргә Башҡортостандан саҡырылған режиссерҙар ярҙам итте. Сәхнәлә Әнис Халиҡов, Разия Хоҙайбирҙина, Фәниә Шафиҡова, Ғәйфулла Мәжитов, Милә Солтанова, Рәмил Сәйфетдинов, Илдар Хәйретдинов, Рәфис Нафиҡов, Харис Фәйзуллин, Лира Хөсәйеновалар сәхнәлә онотолмаҫлыҡ образдар тыуҙырыуын дауам итә. «Ер өҫтөндә йәйғор эленеп торҙо» спектаклен Арғаяш артистары менән Башҡортостан режиссеры Юлиә Һәүбанова ҡуйҙы. Һуғыш ауырлығын үҙ иңдәрендә күтәргән өс колхозсы ҡатын-ҡыҙҙың, өс оло йәштәге әхирәттең яҙмышы ҡатын-ҡыҙҙың тормошҡа ашмаған бәхете тураһында бар дөрөҫлөгөндә, ысын күңелдән яҡтыртыла. Был спектаклдә төп һәм һуңғы ролдәренең береһен халыҡ театры башланғысында торған Разия Әхмәт ҡыҙы башҡара. Финал күренешендә уның героиняһы, тормошта тағы ла яҡшылыҡ, бәхет булырына өмөтләнеп, йәйғор артынан китә.

Театр актерҙарының өлкән быуыны сафы кәмей бара, әммә театр бөгөн дә йәшәй, үҙенең 35 йәшен лайыҡлы ҡаршылай. Ул театр сәнғәтенә ғашиҡ булған кешеләр арҡаһында йәшәүен дауам итә. Илдар Хәйретдиновтан етәксе эстафетаһын Розалиә Нәжметдинова ҡабул итте. Коллектив элеккесә ижади эҙләнеүҙә, ул илдең алдынғы театрҙары: Наум Орлов исемендәге дәүләт академия театры, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры, Ҡазан, Сибай, Салауат театрҙары менән бәйләнеш тота. Алда күп яңы ижади пландар тора.

### ҠОТЛАУҘАР

*Амур Хәбибуллин – «Башҡорт Ҡоролтайы» Силәбе өлкә йәмәғәт ойошмаһы Башҡарма комитеты рәйесе*



Арғаяш башҡорт драма халыҡ театрына 35 йыл тулды!

Был үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ театр күп йылдар инде башҡорт мәҙәниәтен, телен һәм йолаларын һаҡлай һәм арттыра.

Уның спектаклдәрендә Арғаяш районы халҡы ғына түгел, бөтә Рәсәй халҡы үҫте. Театр коллективына үҙ халҡының мәнфәғәтенә фиҙаҡәр эшләгәндәре өсөн ихлас рәхмәтемде белдерәм. Барлыҡ ҡатнашыусыларға ла яңы ижади ҡаҙаныштар һәм еңеүҙәр теләйем!

Һеҙ - беҙҙең мәҙәни байлығыбыҙ, тип ышаныс менән әйтә алам. Илһам һеҙҙән бер ҡасан да китмәһен!

*Рөстәм Фазылов, Салауат дәүләт драма театры актеры*



Арғаяш – минең яратҡан Ватаным. Арғаяш башҡорт халыҡ театры һәм уның ойоштороусыһы Сәйҙә Мөбәрәк ҡыҙы Солтанова артислыҡ һөнәремдә тәүге остаздарым булды. Мин Арғаяшта спектакль ҡуйырға саҡырылғас та шунда уҡ яуап бирҙем. «Көнләше, Америка, көнләш!» спектакле өҫтөндә эшләү мине тағы бер тапҡыр халыҡ театры труппаһында сәхнәне тоғро яратҡан, илһамланып уйнаған кешеләр йыйылыуына ышандырҙы. Шуға күрә спектакль Арғаяш башҡорт халыҡ театры тарихына инде. Сәхнә әҫәре сағыу, дәртле килеп сыҡты. Юбилей менән, ҡәҙерле дуҫтар һәм яҡташтар!